*МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН*

*ГОСУДАРСТВЕННОЕ БЮДЖЕТНОЕ ПРОФЕССИОНАЛЬНОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ ТУЙМАЗИНСКИЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ КОЛЛЕДЖ*

# Акмулла иseme мәңгелек

## IX синыфта башҡорт әҙәбиәте дәресе

*Төҙөүсеһе:* ***Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы,***
*Туймазы педагогия колледжының юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы*

***Туймазы, 2016***

***Маҡсат һәм бурыстар:***
*1. Уҡыусыларҙы М Аҡмулла тормошо һәм ижады менән таныштырыу.*
*2. Уларҙы үҙ аллы һәм төркөм эсендә эшләү күнекмәләренә өйрәтеү, фәнни тикшеренеү эштәренә йәлеп итеү.*
*3. Әҙип шәхесе өлгөһөндә йәштәрҙә әҙәп-әхлаҡ сифаттарын тәрбиәләү.*
*4. Аҡмулла менән ғорурланыу тойғоһон уятыу, бөгөнгө көндә лә халҡыбыҙҙың Аҡмулланы онотмауын күрһәтеү.*

***Йыһазлау:*** «М.Аҡмулла» электрон мультимедиялы әсбап (авторы-А.Босов, Туймазы педагогия коллджы студенты, етәксеһе-Кәримова Г.Я.) Аҡмулла ижады хаҡында китаптарҙан торған күргәҙмә, компьютер, экран, проектор, Башҡортостан картаһы. Парталарҙа – Акмулла тормошо һәм ижадынан төп даталар күрһәтелгән һәм әҙип шиғырҙарынан өҙөктәр яҙылған карточкалар (шиғырҙарҙың жанры күрһәтелә), дәреслектәр, логик-мәғәнәүи моделдәр яһар өсөн схемалар.

***Түбәндәге темалар буйынса презентациялар:***
1. «М.Аҡмулла биографияһы».
2. «М. Аҡмулла исемендәге премия лауреаттары».

***Дәрестә ҡулланылған методтар:*** *үҙ аллы аллы эш, сағыштырыу методы, уКытыусы һөйләүе, тикшеренеү, әңгәмә, күргәҙмәлек, мәғлүмәти технологиялар, өлөшсә эҙләнеү.*

***Ойоштороу формалары****: фронталь, төркөмдәр менән эшләү, индивидуаль эш.*

***Төшөнсә, терминдар:*** *жанр, хитап, мәрҫиә, мәдхиә .*
***Предмет-ара бәйләнеш:*** *һынлы сәнғәт, әҙәбиәт теорияһы, география.*
***Дәресте үткәреү ваҡыты: 45 минут***

***Дәрескә эпиграф:*** *"Тауҙар кешеләр шикелле -*
*Бейек булған һайын,*
*Ғүмерҙәре бәхәслерәк,*
*Яҙмыштары быйын."*

**Уҡытыусы**: һаумыһығыҙ, kыҙҙар, егеттәр!
(*Таkталағы эпиграфты уkый)* "Тауҙар кешеләр шикелле -
Бейек булған һайын,
ғүмерҙәре бәхеслерәк,
Яҙмыштары ҡыйын."

Был юлдарҙың авторы М.Кәрим беҙгә ниндәй фекерҙе еткерергә теләне икән, нисек уйлайһығыҙ?

**Укыусылар:** *Халыкка билдәле кешеләрҙең яҙмышы ауыр һәм катмарлы була.*

**Укытыусы**: Дөрөҫ. Ә XIX быуат шағиры М.Аҡмулланың тормошон һөйләгәндә, ошо шиғыр юлдарын миҫал итеп килтерә алабыҙмы?
**Укыусылар:** *Ул – Башҡортостан тарихында билдәле шәхес. Ишетеп*

*белеүебеҙсә, М.Аҡмулла ҡатмарлы тормош кисергән, яҙмышы ауыр булған. Уның тураһында һөйләгәндә, М.Кәримдең «Тауҙар» шиғырын миҫал итеп килтерергә мөмкиндер, моғайын.*

**Уҡытыусы**: Шулай итеп, беҙ М.Аҡмулла биографияһын өйрәнәбеҙ. Эпиграфтан сығып, дәресебеҙҙең маҡсатын билдәләйек.

**Уҡыусылар менән бергә хәл итеү:** М.Аҡмулла шәхесен, тормошон өйрәнеү; яҙмыш уға ниндәй һынауҙар әҙерләгән һәм әҙип уларҙы нисек йырып сыҡҡан, бының өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк - ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап бирербеҙ.

**Уҡытыусы**: Темаңы һәм эпиграфты яҙып ҡуйығыҙ. Әйтелгән һорауҙарҙан тыш һәр берегеҙ М.Аҡмулла хаҡында тағы ниндәй яңылыҡ белергә теләр ине? Хәҙер дәфтәрегеҙгә шул һорауҙы яҙып ҡуйығыҙ, дәрес аҙағында яуап ҡайтарырһығыҙ. *(Уҡыусылар дәрестә яуап бирергә теләгән һорауҙарҙы дәфтәрҙәренә яҙалар)*

**Уқытыусы**: Дәрестә төркөмдәргә бүленеп эшләйбеҙ. Материалдар күп, шуға күрә мин һәр уҡыусыға логик-мәғәнәүи модель тултырырға тәkдим итәм. (*Моделдәр таратыла)*

Логик-мәғәнәүи модель – материалдың бөтә үҙенсәлектәрен координат уktарында туплаған схема-конспект. Һеҙ мөһим тип һанаған яңылыkты, мәғлүмәтте координат төйөндәрендә билдәләп барығыҙ. Кординаттар, уға исемдәр тәkдим итеЛә: «Әҙип тормошонан төп даталар», «Шиғырҙары», «Нимә тураһында яҙған», «Жанрҙар», «Аҡмулланы мин өр-яңынан астым». Уларҙа нисә төйөн икәнен үҙегеҙ хәл итегеҙ. Дәрес аҙағында был моделдәрҙе сағыштырырбыҙ, баһаларбыҙ.

Тәүге эшебеҙ “Аҡмулла эҙҙәре буйлап ” буйлап тип атала. Һеҙҙең алда - карталар, Аҡмулла тормошонан төп даталар яҙылған карточкалар. Материалдарға таянып, Аҡмулла ниндәй осорҙа ҡайҙа йәшәгән һәм ни эшләгән, шуларҙы билдәләйһегеҙ, картанан күрһәтәһегеҙ.

1-се төркөм 1831- 1860 йылдарҙы, 2-се төркөмгә - 1865 -1880 йылдар, 3-сө төркөм Аҡмулланың һикһәненсе йылдарҙан башлап ғүмеренең аҙағынаса тиклемге йылдарҙы өйрәнә. Эш тамамланғас, төркөм вәкилдәре алға сығып слайдтағы карта буйынса һөйләргә тейеш була.

*(Төркөмдәрҙә эш башҡарыла, уkытыусы ярҙамлаша)*

| **_1-се төркөм яуабы. Кемдер карта буйынса күрһәтеп бара, кемдер һөйләй_**<br>**_(Ә ҡалған уkыусылар ЛММ-дең беренсе уғын тултырып баралар)_** | | |
|---|---|---|
| 1831й,<br><br>14 декабрь | *Яуап яkынса түбәндәгесә булырға мөмкин:* | *Картала* |
| | Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов Ырымбур губернаһы Бәләбәй өйәҙе 12-се Башкорт кантоны Күл-иле Мең волосы Тукһанбай ауылында тыуған (Башкортостандың хәҙерге Миәкә районы). Атаһы - Камалетдин Искужа улы, әсәһе - Бибиөммөгөлсөм Сәлимәйән kыҙы. Әсәһе йәшләй вафат була. | *Миәкә районы, Тукһанбай ауылы* |

| | | |
|---|---|---|
| 30 йылдар аҙағы - 1853 йылдар | Башланғыс белемде Мифтахетдин тыуған ауылында ала, унан - Ябалаktамаk ауылында Лоkман муллала, аҙаk Мәнәүезтамаk, Әнәс ауылы мәҙрәсәләрендә уkый. | *Яkын – тирәләге ауылдар* |
| Илленсе йылдар | Стәрлебаш мәҙрәсәһенә килеп суфый шағир Шәмсетдин Зәки менән таныша, уның дәрестәрен тыңлай. Шиғриәт менән kыҙыkһыныуы шунда башлана. Фарсы, ғәрәп телдәрен, көнсығыш әҙәбиәтен өйрәнә.Троицк kалаһында күренекле дин әһеле буласаk ишан З.Рәсүлев менән таныша. Троицк мәҙрәсәһендә уkып ала. Йәй ваkыттарында шул тирәләге башkорт, kаҙаk ауылдарында йәшәй, балалар уkыта. | *Стәрлебаш,*<br>*Троицк,*<br>*Ҡаҙағстан* |
| 1859 – 1860 йылдар | Мулла булып китә һәм Троицкиға яkын урынлашkан ауылдарҙа kаҙаk, kараkыпсаk kарағыҙ балаларына белембирә. Талантлы шағир-импровизатор һәм хаk уkытыусы, ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе булып таныла. Ошо сифаттары өсөн ябай халыk уға «Акмулла» тип исем бирә. | *Троицк,*<br>*Ҡаҙағстан* |
| ***2-се төркөм яуабы*** | | |
| 1866 – 1867 йылдар | Тыуған ауылы Тукһанбайға сығып китеүенә 13 йыл тигәндә әйләнеп kайта, әммә уkымышлы Аkмулланы бында якты йөҙ менән kаршыламайҙар. Ул тыуған ауылын бөтөнләйгә ташлап китә.<br>Атаһынан алып киткән аты һәм арбаһы менән тау яғы башkорттары араһында йөрөй. Халыkты белемгә өндәп шиғырҙар яҙа. Ғәҙеллеге өсөн уны халыk бик ярата. Тик тура һүҙле Аkмулланан байҙар ғына kурkа. Шағир уларҙан көлөп шиғырҙар яҙа. | *Тукһанбай*<br>*Учалы,*<br>*Баймак*<br>*яктары* |
| 1867 – 1871 йылдар | Ҡаҙаk старшинаһы Иҫәнгилде менән низағлаша һәм уның доносы буйынса Троицк төрмәһенә ябыла. Аkмулла унда үҙенең иң яkшы шиғырҙарының береһен - «Урыным – зиндан» шиғырын яҙа. | *Ҡаҙағстан*<br>*Троицк* |
| әҙғә йыл | Ырымбур генерал-губернаторы Н.А. Крыжановский Троицк kалаһына килгәнен белгәс, уға һорау хаты яҙа. Дуҫтары 2 мең аkса йыйып түләй, һәм ул төрмәнән ваkытлыса сығарыла. | *Троицк* |
| 1872 йыл | Петербургтан Ырымбурға kаҙаk солтаны, генерал Ғәбиҙулла Йыһангиров килә. Был ваkытта Аkмулла Ырымбурҙан йыраk түгел генә йәшәй һәм ул генералға, төрмәнән азат ителеү өсөн ярҙам һорап, шиғри хат яҙа. Ҡазанда, Петербургта була. Ғәбиҙулла Йыһангиров ярҙамында уны «арестантский рота»нан азат итәләр. | *Ырымбур*<br>*Ҡазан,*<br>*Петербург* |

| | | |
|---|---|---|
| 1872-1880 йылдар | Бер нисә йыл Ҡаҙағстандың Петропавловск өйәҙендә йәшәй. Аҙаҡ Ҡустанай, Күксәтәү, Петропавловск һәм Себер ҡаҙаҡтары араһында йәшәй, Урал аръяғы башҡорт ауылдарына йыш килә, күп дуҫтар, фекерҙәштәр таба. Балалар уҡыта. Төрлө аҡын һәм сәсәндәр йыйындарында ҡатнаша. | *Ҡаҙағстан*<br><br>*Урал аръяғы* |
| **3-сө төркөм сығыш яһай** | | |
| һикһәненсе йылдар | Дин әһеле, тарихсы, мәғрифәтсе, йәҙитсе Шиһабетдин Мәржәнигә бағышлап мәдхиә яҙа. Мәржәни мәрхүм булғас, «Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе» тип үҙгәртә. Шулай уҡ «Нәсихәттәр», «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк» һ.б. халыҡҡа киң билдәле әҫәрҙәрен ижад итә. Ырымбур губернаһының Орск өйәҙе Темәс һәм 2-се Этҡол ауылдарында (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы) мөғәллим була. | Баймаҡ районы |
| 1892 йыл | Ҡазан университеты типографияһында «Дамелла Шиһабетдин хәҙрәттең мәрҫиәһе» исемле тәүге һәм шағирҙың тере сағындағы берҙән-бер китабы баҫылып сыға. | Ҡазан |
| 1894 йыл, сентябрь | Өфө ҡалаһына килә. Бында дин әһеле, билдәле ғалим Риза Фәхретдинов менән осраша. Аҡмулла китап итеп баҫтырып сығарыр өсөн үҙенең ҡулъяҙмаларын килтерергә вәғәҙә бирә. Шағирҙың килеү хөрмәтенә мәжлес үткәрелә, унда Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев менән шиғри әйтеш байрамы ойоштоpола. | Өфө |
| 1895 йыл,<br><br>8 октябрь | Аҡмулла Троицкиҙан Златоустҡа барған юлда Миәс ҡалаһы янындағы Һарыҫтан ауылы янында үлтерелә. Башҡорт халҡының бөйөк улы ғүмере шулай фажиғәле рәүештә өҙөлә. Шағир Миәс ҡалаһының мосолмандар зыяратында ерләнә. | Миәс-Һарыҫтан юлы |

**Уҡытыусы**: Рәхмәт. Иптәштәрегеҙҙең һөйләүе буйынса нимәләр белдегеҙ, һығымта яһағыҙ.

***Уҡыусылар:*** *М.Аҡмулла-илгиҙәр шағир булған, ябай кешеләр араһында йәшәгән, халыҡты аң-белемгә өндәгән, балалар уҡытҡан, төрмәлә ултырырға тура килгән, әммә барыбер бирешмәгән, ғәҙеллек өсөн көрәшкән, көслө кеше булған һ.б.*

**Уҡытыусы**: Әгәр һеҙ рәссам булһағыҙ, шағир хаҡында ниндәй картина ижад итер инегеҙ.*(Яуаптар)* Ысынлап та, рәссамдар М.Аҡмулла тормошо менән ҡыҙыҡһынғандар, өйрәнгәндәр һәм бик матур картиналар яҙғандар. Беҙ улар аша шағирҙың үҙен, тормошон күҙ алдына баҫтыра алабыҙ. Ә хәҙер бергәләп шул картиналар репродукцияларын файҙаланып төҙөлгән М.Аҡмулла тормошо хаҡындағы презентацияны ҡарайыҡ, алған белемебеҙҙе нығытайыҡ. Моделдәрегеҙҙе тултырып бөтөрөгөҙ.

*(Презентацияны ҡарау.*

*Уҡытыусы презентацияны ҡарау мәлендә өҫтәлмә мәғлүмәт еткерә*)

**Уҡытыусы**: Уҡыусылар, биографияны өйрәнеү аша М.Аҡмулланың ниндәй сифаттарын астығыҙ.

***Уҡыусылар:*** *Ул ғәҙел, тура һүҙле, халыҡты аңлаған кеше булған. (Башҡа төрлө яуаптар булырға мөмкин)*

**Уҡытыусы**: Фекерегеҙ менән килешәм. Уның донъяға ҡарашын, кешеләргә мөнәсәбәтен, кешелек сифаттарын асыҡлар өсөн, тағын нимәләргә мөрәжәғәт итергә мөмкин?

***Уҡыусылар:*** *Шиғырҙарына, сөнки автор әҫәрҙәрендә үҙенең кисерештәре тураһында яҙа, тормошҡа, кешеләргә мөнәсәбәтен белдерә. (Икенсе төрлө яуаптар булырға мөмкин)*

**Уҡытыусы**: Дөрөҫ. Артабан беҙ һеҙҙең менән М.Аҡмулланың шиғырҙарына байҡау яһайбыҙ. Әҙип ниндәй уй-тойғолар менән янып йәшәгән, ниндәй сифаттарға эйә булған - шуларҙы асыҡлайыҡ.

Һеҙҙең алдығыҙҙа - Аҡмулла шиғырҙары, уларҙы уҡып сығығыҙ һәм авторҙың әйтергә теләгән фекерен билдәләгеҙ. Сығыш яһаусылар иң тәүҙә шиғырҙың тәүге строфаһын тасуири итеп уҡып күрһәтергә, унан шиғырҙа нимә хаҡында һүҙ барғанлығын әйтергә тейеш.

*(Төркөмдәрҙә эш башҡарыла. Улар бирелгән ике шиғырҙың тема һәм идеяһын асыҡлай, яуап биреүселәрҙе билдәләй, тасуири уҡырға әҙерлек ойошторола)*

**Уҡытыусы**: Төркөмдәрҙең эше тамамланды. Төркөм вәкилдәрен тыңлау мәлендә бөтәбеҙ ҙә логик-мәғәнәүи моделдәрҙә «Шиғырҙары», «Нимә тураһында яҙған» тигән координаттарҙы тултырабыҙ.

**Төркөм вәкилдәре сығыш яһай. Тыңлаусылар урында эшләйҙәр**.

***1-се төркөм*** *(Уларға ике шиғыр-"Башҡорттарым, уҡыу кәрәк", "Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе" бирелә)*

1. "Башkорттарым, уkыу кәрәк" шиғырында Акмулла, үҙе йәшәгән заманда халыkтың ауыр тормошон күреп, уларҙы уkырға, белемле, һөнәрле булырға саkыра.
2. "Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе" әҫәрендә йәмғиәттең йөҙөн билдәләүсе, халыkkа өлгө булырлыk мәғрифәтле шәхесте ололап яҙа.

***2-се төркөм*** *("Нәфсе", "Өмөт» шиғырҙарын тикшерәләр).*

1. "Нәфсе" шиғырында байлыk артынан kыуыусы наҙан муллаларҙы, уларҙың kуштандарын тәнкитләй
2. Йәмғиәттәге ғәҙелһеҙлектәр хаkында уйлана. Ябай халыkтың ауыр тормошон әсенеп тасуирлай ("Өмөт»).

***3-сө төркөм*** *("Дуҫлыk» һәм "Яҙ" әҫәрҙәрен өйрәнәләр)*

1. Тәбиғәт күренештәренә, йыл миҙгелдәренә арнап шиғри әҫәрҙәр ижад итә ("Яҙ").
2. “Дуҫлыҡ» шиғырында дуҫлыҡ хаҡында яҙа, "Кем ул ысын дуҫ?" һорауына яуап бирә

**Уҡытыусы**: Яуап биреүселәргә рәхмәт. Алдағы дәрестәрҙә шиғырҙарҙы тағы ла ентеклерәк өйрәнерһегеҙ. Ә хәҙер һеҙгә бәйет тыңларға тәҡдим итәм. Ул нисек атала, шағир әҫәрҙә ниндәй сифаттарға эйә булырға саҡыра.

*("Нәсихәттәр" тыңлана).*

***Уҡыусылар:*** *Шиғырҙың исеме - "Нәсихәттәр". Аҡмулла кешене яҡшылыҡ өлгөһөндә тәрбиә биреү, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләрен күтәрә. Уның өсөн иң ҡиммәт нәмә – кешеләрҙең күңел сафлығы.*

**Уҡытыусы**: Шулай итеп, шиғырҙар аша нимәләр белдегеҙ, шағирҙы нимәләр борсоған, шунан сығып Аҡмуллаға ниндәй ҡылҡһырлама бирерһегеҙ?

***Уҡыусылар:*** *Ул белемле булған, ябай халыҡты белемле булырға саҡырған, уларҙың күңелен яҡшы аңлаған, тормошто яҡшыртырға ынтылған, наҙан муллаларҙан әсе көлгән, ғәҙел, тура һүҙле, сәсән телле кеше булған һ.б.*

**Уҡытыусы**: Шиғырҙарҙың жанрына күҙәтеү яһайыҡ. Аҡмулла Көнсығыш әҙәбиәтенән ингән ниндәй рифма төрҙәрен, жанрҙарҙы ҡуллана, ул халыҡ ижады традицияларына таянамы икән?

*(Карточкаларға таянып, уҡыусылар яуаптарын әйтәләр.)*

**Уҡыусылар:** *М.Аҡмулла робағиҙы, мәснәүиҙе ҡуллана. Мәрҫиә, мәдхиә, хитап кеүек Көнсығыш әҙәбиәтенән килгән жанрҙарға мөрәжәғәт итә. Халыҡ ижады традицияларынан ҡобайыр ижад итә.(ЛММ-де тултыралар. Уҡытыусы жанрҙарға аңлатма бирә)*

**Уҡытыусы**: Күреүебеҙсә, М.Аkмулла – алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы шағир булған, урта быуаттар төрки һәм башkорт яҙма әҙәбиәтенең дә, халыk ижадының да, жанрҙарын бик һәйбәт белгән.

Хәҙер логик-мәғәнәүи моделегеҙҙең аҙаkkы “*Аkмулланы мин өр-яңынан астым...”* исемле уғын тултырайыk. Әҙип хаkында нимәләр белдегеҙ, шуларҙы төйөндәргә яҙып сығығыҙ. *(Студенттар үҙ аллы уkты тултыралар. Модель буйынса эште тамамлайҙар).*

Кем үҙ моделе хаkында һөйләргә теләй, рәхим итегеҙ. *(Студенттар һөйләйҙәр. Башkалар өҫтәйҙәр).* Тимәк, күптәрегеҙҙең моделе беҙ тәkдим иткән моделгә оkшаған. Слайдkа күҙ һалығыҙ.

**Уҡытыусы**: Дәрестең башындағы эпиграф буйынса һорауыбыҙға кире ҡайтайыҡ. Яуап таптыҡмы?

**Уҡыусылар***: Аҡмулла тормошоноң ауыр һәм ҡатмарлы булыуын күрҙек. Шул осорҙа халыҡ ауыр тормош кисергән, ә шағир быға битараф булмаған, йөрәге аша үткәргән, ярҙам итер өсөн юлдар эҙләгән, ғәҙелһеҙлек менән көрәшкән. Унан байҙар һәм муллалар ҡурҡкан, үс алырға тырышкан.*

**Уҡытыусы**: Шулай уҡ һәр берегеҙ дәрес башында үҙен ҡыҙыҡһындырған һорау уйланы һәм дәфтәренә яҙып ҡуйҙы. Шуларға яуап бирә алырһығыҙмы икән? *(Бер нисә уҡыусы һорауын уҡый һәм яуап бирә)*
**Уҡытыусы**: Эйе, шағирҙар тормошо еңелдән булмай. Әммә был улар бәхетһеҙ тигәнде аңлатмай. Шағирҙар халыҡ өсөн йәшәй, ижад итә, ошонан йәм, ғәм табып йәшәй. Аҡмулла исеменең мәңгелеге сере шунда. Бөгөнгө көндә өс халыҡ - башҡорттар, татарҙар, ҡаҙаҡтар шағирҙы үҙенеке тип иҫәпләй, оло хөрмәт менән иҫкә ала.

Хәҙерге заманда Аҡмулланың юлын дауам итеүселәр бармы икән, улар ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ? Кемдәрҙе миҫал итеп килтерә алаһығыҙ?

**Уҡыусылар**: *Акмулла юлын дауам итеүселәр кешеләр өсөн йәшәргә тейеш. Уларҙың хеҙмәте халыкҡа бағышланһын. Ундай кешеләр беҙҙең Башкортостанда бар. Яҙыусылар, табиптар, укытыусыларҙы миҫал итеп килтерергә була.(Башҡа төрлө яуаптар)*

**Укытыусы**: Ысынлап та, бөгөн шундай кешеләр бар. Миәкә районы хакимиәте Башkортостан сәнғәте һәм әҙәбиәте өлкәһендә эшләүсе, Акмулла идеяларын үҫтереүсе замандаштарыбыҙға премия булдырҙы. Улар – шағирҙың вариҫтары. М. Акмулла исемендәге премия лауреаттары менән танышайык.

*("Аҡмулла исемендәге премия лауреаттары". Презентация kарау)*

Артабан төркөмдәрҙең эштәрен баһалайык. Иптәштәрегеҙ нисек яуап бирҙе, кемдең яуабы оҡшаны, төркөмдәргә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ. *(Төркөмдәр бер-береһенең эшен баһалай, якшы яуап биреүселәрҙе әйтә. Укытыусы ла үҙ фекерен әйтә, өй эшен бирә)*

**Укытыусы**: Р. Фәхретдиндең шундай һүҙҙәре бар. “Әҙип һәм ғалимдары булмаған халыk бәхетһеҙ, мәшһүр кешеләрен онотkан халыk яkлаусыһыҙ, әҙәбиәте булмаған милләт рухһыҙ”. Әҙәбиәтебеҙ бар, тимәк, милләтебеҙ рухлы. Беҙ - бәхетле, сөнки әҙип һәм ғалимдарыбыҙ бар, Халҡыбыҙ яҡлаусылы булһын өсөн, Аҡмулла кеүек бөйөк шағирҙарыбыҙҙы онотмайыҡ.

Ә бөгөнгө көндә әҙәбиәтебеҙ киңлегендә Акмулла тауы бейек, юғары, ғорур булып kала. Елдәргә лә бирешмәй, йәшендәрҙән дә kурkмай. Һәм шулай булып kаласаk та...

Дәресебеҙ тамам. Һау булығыҙ!

### *Ҡулланылған әҙәбиәт*


1. Вилданов Ә. Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981й. - 168 бит.
2. Иҙелбаев М. М. Аҡмулла шиғриәтендә йырауҙар һәм сәсәндәр ижады традициялары. // Башkортостан уkытыусыhы. - 2006. - №3. - 35-се бит.
3. Кунафин Г. Поэтическое эхо прошлого. - Уфа: Китап, 2004. - 316с.
4. Ҡунафин Ғ. Олуғ шәхесебеҙ. // Ағиҙел. – 2001. - № 12. - 158-се бит.
5. Харисов Ә. Башkорт халkының әҙәби мираçы. - Өфө: Башkортостан китап нәшриәте, 1965. - 415 бит.
6. Хөсәйенов Ғ.Б. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. - Өфө: Китап, 2006. - 248 бит.
7. Шакур Р. Звезда поэзии. Башкирский поэт-просветитель М. Акмулла. - Уфа: Китап, 2006. - 200с.
8. Шәрипова З. Башkорт әҙәби фекере. - Өфө: Китап, 2008.
9. М.Аkмулла. Электрон мультимедиялы әсбап. Төҙөүсеһе:Босов А. Етәкселәре Кәримова Г.Я.,Нәсибуллин А.Ф. Туймазы, 2013.

*Заявка на участие в конкурсе*

| | |
|---|---|
| Ф.И.О. | ***Каримова Гульнара Яхиевна*** |
| Должность, квалификационная категория | ***Преподаватель башкирского языка и литературы,<br>высшая квалификационная категория,<br>стаж-22г.*** |
| Полное название образовательной организации | ***Государственное бюджетное профессиональное образовательное учреждение<br>Туймазинский педагогический колледж*** |
| E-mail | rr.ttoo@mail.ru |
| Класс | ***9 кл, родная литература*** |
| Технологии | ***ИКТ,<br>частично-поисковая,<br>технология Штейнберга.*** |
| Адрес учреждения | ***г. Туймазы<br>ул. Комарова-8а*** |
| Контактный телефон | ***8937-302-24-92- телефон участника<br>(34782) 7-16-97 - рабочий телефон*** |